Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение средняя общеобразовательная школа с. Нигаматово муниципального района Баймакский район Республики Башкортостан

Утверждаю ____________
Директор МОБУ СОШ с.Нигаматово
Исянбаев Н.А.
Приказ № 115 от 30.08.2023

МОБУ СОШ с. Нигаматово

**ГДО д. Верхнеяикбаево МОБУ СОШ с.Нигаматово**
**Комплексно – тематический план на 2023 -2024 учебный год**

**2023 / 2024 уҡыу йылына комплекслы – тематик план**

**Воспитатель Мунасипова Г.А.**

<table>
<tr><td rowspan="5">Тема<br>1 –15 сентябрь<br>“Белем байрамы”<br>«День знаний»</td><td>Дәрестәр, уйындар, әңгәмәләр.</td></tr>
<tr><td>Белем көнө.</td></tr>
<tr><td>“Хуш бул, йәй!” “Һаумы, балалар бвҡсаһы!”</td></tr>
<tr><td>«Баҡсала кем эшләй?”</td></tr>
<tr><td>“Беҙ буласаҡ уҡыусылар!”</td></tr>
<tr><td>Дөйөмләштереү сараһы</td><td>“Көҙ” темаһына выставка</td></tr>
<tr><td colspan="2">Балаларҙың балалар баҡсаһына, мәктәпкә ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙарын үҫтереү, китапҡа һөйөү тәрбиәләүҙе дауам итеү. Аң – белем, танып – белеүгә мотивация булдырыу. Балалар баҡсаһы һәм мәктәп бала өсөн иң яҡын социаль уратып алыу икәнен төшөндөрөү, ундағы үҙгәрештәргә иғтибар йүнәлттереү. Һәр баланың индивидуаллеген, берҙән – бер икәнен аңлауҙарына булышлыҡ итеү. Балалар араһында бер – береһенә ҡарата дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре формалаштырыу. Мәктәп менән таныштырыу. Балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәре һөнәрҙәре тураһында белемдәрен киңәйтеү (тәрбиәсе, тәрбиәсе ярҙамсыһы, табип, урам һепереүсе, ашнаҡсы һ.б.)</td></tr>
<tr><td rowspan="4">Тема<br>18 сентябрь – 29 сентябрь<br>“Көҙгө биҙәктәр”<br>«Осенние узоры»</td><td>«Хәүефһеҙлек һәм бала»</td></tr>
<tr><td>«Көҙгө үҙгәрештәр»</td></tr>
<tr><td>“Икмәк – табын ҡояшы”, “Игенсе һөнәре тураһында”</td></tr>
<tr><td>“Тәрбиәсе көнө”. Балалар баҡсаһы хеҙмәткәрҙәре һөнәрҙәре тураһында.</td></tr>
<tr><td>Дөйөмләштереү сараһы</td><td>Көҙгө урманға экскурсия, гербарий, ҡул эштәре өсөн материалдар йыйыу.</td></tr>
<tr><td colspan="2">Балаларҙы көҙ билдәләре менән таныштырыуҙы дауам итеү.Тәбиғәт күренештәре тураһында балаларҙың белемен тәрәнәйтеү (һыу, һауа, ямғыр, ысыҡ, томан, ҡырау, тамсы) Миҙгел байрамдары тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт тураһында һәм уларҙың үҙ – ара бәйләнеше тураһында күҙаллауҙар үҫтереү. Тәбиғәткә һаҡсыл һәм аңлы ҡараш тәрбиәләү. Тәбиғәттә үҙ – үҙеңде тотоу ҡағиҙәләрен нығытыу. Йәшелсә – емеш тураһында дөйөмләштерелгән төшөнсәләрҙе нығытыу. Ағасты, ҡыуаҡты тышҡы күренештәренә ҡарап билдәләргә өйрәтеүҙе дауам итеү. Күсер һәм ҡышлаусы ҡоштар тураһында белемдәрен киңәйтеү.Баҡсала һәм урманда үҫкән ашарға яраҡлы еләктәр тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Баҫыуҙа үҫкән ашлыҡ культуралары менән танышыуҙы дауам итеү.</td></tr>
<tr><td rowspan="4">Тема<br>2 октябрь -13 октябрь<br>“Минең Башҡортостаным”</td><td>“Минең тыуған республикам”.</td></tr>
<tr><td>“Минең тыуған ауылым”</td></tr>
<tr><td>Салауат Юлаев һәйкәленә, Өфө ҡалаһының иҫтәлекле урындарына интерактив сәйәхәт.</td></tr>
<tr><td>Иҫтәлекле урындар. Тәбиғи ҡомартҡылар. Башҡортостандың ете мөғжизәһе.</td></tr>
</table>

<table>
<tr><td>«Мой Башкортостан»</td><td>“Башҡортостаным – илем!” Республика көнөнә ҡарата саралар.</td></tr>
<tr><td>Дөйөмләштереү сараһы</td><td>Гражданлыҡ – патриотик эшмәкәрлек аҙналығы. Дөйөмләштереү сараһы.</td></tr>
<tr><td colspan="2">Тыуған ил тураһында төшөнсәләр киңәйтеү. Нимә ул Ватан, тыуған яҡ, Башҡортостан картаһы, Башҡортостандағы ҡалалар тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү.<br>Башҡортостандағы төрлө милләт халыҡтары, мәҙәниәте, теле, ғөрөф – ғәҙәте, башҡорт халҡының күренекле шәхестәре менән танышыу. Башҡортостандың тәбиғәте, ҡурсаулыҡтар, тәбиғәт ҡомартҡылары тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Башҡортостанда үҫкән үҫемлектәр тураһында белемдәр киңәйтеү.Ҡыҙыл китап, Башҡортостандың файҙалы ҡаҙылмалары, үҙҙәре йәшәгән ауыл тураһында белемдәрен арттырыу. Башҡорт теленә ҡарата ихтирам тәрбиәләү. Башҡортса саф матур итеп һөйләшеү. Яҡын һәм алыҫ ҡәрҙәштәре, атай – әсәй яғынан башҡа туғандар тураһында белемдәр нығытыу. Телевизор һәм радио аша башҡорт телендә тапшырыуҙар тураһында балаларға белемдәр биреү.<br>Башҡорт халҡының милли батыры Салауат Юлаев менән таныштырыуҙы дауам итеү. Батырсылыҡ, етеҙлек, сослоҡ, мәргәнлек сифаттары тәрбиәләү (гендер тәрбиәһе). Салауаттың ижады менән таныштырыуҙы дауам итеү (ҡобайырҙар, шиғырҙар). Салауаттың йәшәгән урыны, ғаиләһе, уның баласағы тураһында белемдәр арттырыу. Өфө ҡалаһында Салауат Юлаев һәйкәле буйынса мәғлүмәттәр биреү. Баймаҡ районы тураһында белемде киңәйтеү, яҡташ шағирҙарҙың ижады менән танышыуҙы дауам итеү.<br>Башҡортостандың дәүләт тамғалары (флаг, герб, гимн) тураһында белемде киңәйтеү..</td></tr>
<tr><td rowspan="4">Тема<br>16 октябрь - 3 ноябрь<br>“Халыҡтар берҙәмлеге көнө”<br>“День народного единства”</td><td>“Рәсәй - беҙҙең илебеҙ”.</td></tr>
<tr><td>“Рәсәй ҡалалары”.</td></tr>
<tr><td>Дәүләт символикалары.</td></tr>
<tr><td>Рәсәй буйлап интерактив сәйәхәт</td></tr>
<tr><td>Дөйөмләштереү сараһы</td><td>Мин Рәсәй тураһында нимәләр беләм?</td></tr>
<tr><td colspan="2">Тыуған илебеҙ Рәсәй тураһында төшөнсә биреү. Дәүләт байрамдары, традициялары, ил тарихына ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыу, тыуған ил өсөн ғорурлыҡ тойғоһо һәм һөйөү тәрбиәләү. Рәсәй Федерацияһының дәүләт тамғалары (флаг, герб, гимн) менән таныштырыу. Рәсәй илен, халҡын данға күмгән шәхестәр тураһында төшөнсәләр биреү. Рәсәй – мөһәбәт һәм күп милләтле дәүләт, милләтттәр үҙ – ара татыу, дуҫ булыуҙарын аңлатыу. Рус халҡының төп милләт булыуын һәм күпселекте тәшкил итеүен, уның теле дәүләт теле, рустарҙың ғөрөф - ғәҙәттәрен, биҙәү – ҡулланма сәнғәте өләгөләре менән танышыу. Баш ҡала Мәскәү, уның данлыҡлы урындары, картала урыны менән танышыу. Төрлө халыҡтарҙың милли кейем үҙенсәлектәре менән танышыу.</td></tr>
<tr><td rowspan="4">Тема<br>6 ноябрь – 1 декабрь<br><br>“Минең ғаиләм”<br>“Сәләмәт тормош”<br>“ Әсә көнө”</td><td>“Һаулыҡ – хеҙмәт ярата”</td></tr>
<tr><td>“Нимә ул спорт?”</td></tr>
<tr><td>“Сәләмәтлек – иң ҙур байлыҡ”. Һаулыҡ көнө.</td></tr>
<tr><td>“Хәүефһеҙлек аҙналығы”</td></tr>
</table>

<table>
<tr><td>Дөйөмләштереү сараһы</td><td>Әсә көнөнә ҡарата байрам сараһы</td></tr>
<tr><td colspan="2">Сәләмәт тормош рәүеше тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү, сәләмәт йәшәү рәүеше булдырыуға ынтылыш тәрбәләү. Кеше организмының эшмәкәрлеге үҙенсәлектәре һәм уның бер бөтөн булыуы тураһында балаларҙың белемдәрен байытыу. Баланың үҙ организмының үҙенсәлектәре тураһында төшөнсәләрҙе нығытыу. Сәләмәт йәшәү рәүешенең мөһим компоненттары (дөрөҫ туҡланыу, хәрәкәт, йоҡо һәм ҡояш, һауа һәм һыу – беҙҙең яҡын дуҫтарыбыҙ) һәм һаулыҡты ҡаҡшатыу факторҙары тураһында күҙаллауҙарын киңәйтеү. Көн режимы, гигиена тураһында белемдәрен киңәйтеү. Олимпия хәрәкәте тураһында төшөнсәләр биреү. Ғаилә ҡиммәттәре тураһында төшөнсә биреү, ғаилә ағзаларына һөйөү, ихтирам тәрбиәләү, туғанлыҡ ептәре, кесе һәм оло туғанлыҡ дәрәжәләрен аңлатыу. Ата – әсәләрҙең ғаилә бурыстары, хеҙмәте, профессиялары (тапиб, һатыусы, ашнаҡсы, уҡытыусы, сәс киҫеүсе, хат ташыусы, төҙөүсе, тегенсе, ).уларҙың эш ҡоралдары, йорт адрестары, ғаилә ағзаларының үҙ - ара мөнәсәбәте тураһында белем биреү. Хеҙмәт кешеһенә ҡарата һөйөү тәрбиәләү. Экскурсиялар ваҡытында тормош хәүефһеҙлеген һаҡлау ҡағиҙәләрен нығытыу. Балаларға халыҡ мәҡәлдәре , ҡанатлы һүҙҙәр тураһында белемдәр биреү. Хәүефһеҙлек, үҙ – үҙеңдең һаулығыңа иғтибарлы булыу нигеҙҙәрен өйрәтеү. Әсә көнөнә ҡарата ижади эштәр.</td></tr>
<tr><td rowspan="4">Тема<br>4 декабрь – 29 декабрь<br><br>“Яңы йыл байрамы”<br>«Новогодний праздник»</td><td>“Шыршы ҡупшы кейенгән”.</td></tr>
<tr><td>«Башҡорт Ҡыш бабайы”</td></tr>
<tr><td>«Төрлө илдәге Ҡыш Бабайҙар”</td></tr>
<tr><td>“ Ҡышҡы мөғжизә”</td></tr>
<tr><td>Дөйөмләштереү сараһы</td><td>Яңы йыл байрамына арналған иртәлек</td></tr>
<tr><td colspan="2">Балаларҙың Яңы Йыл тураһында белемдәрен киңәйтеү: (иртәлектәр, спектаклдәр, әкиәттәр, ата – әсәләр менән бергә байрамдар ойоштороу. Ҡышҡы теләктәр әйтеү. Башҡорт Ҡыш бабайының тыуған иле Ирәмәл тураһында мәғлүмәттәр биреү, уның биләмәһе менән танышыу, төрлө илдәрҙәге Ҡыш бабайҙар тураһында мәғлүмәттәр биреү. Башҡа илдәрҙә Яңы йыл байрамдарын нисек үткәрелеүе тураһында белемде арттырыу. Ижади зауыҡ үҫтреүҙе дауам итеү. Башҡорт халҡының йола байрамы Нардуған менән таныштырыу. Төрлө ҡатнаш техниа ҡулланып Яңы йыл байрамын һүрәтләргә өйрәнеү, сағыу төҫтәр, фантазия, күҙаллауҙар ҡулланырға өйрәнеү.</td></tr>
<tr><td rowspan="4">Тема<br>15 ғинуар - 2<br>ФЕВРАЛЬ<br>“Ҡыш”<br>«Зима»</td><td>«Ҡышҡы тәбиғәт”</td></tr>
<tr><td>«Ҡышҡы спорт уйындары»</td></tr>
<tr><td>“Ҡыш көнө хайуандар донъяһы”</td></tr>
<tr><td>“Ҡыш көнө ҡоштар донъяһы”</td></tr>
<tr><td>Дөйөмләштереү сараһы</td><td>Балалар эштәренән күргәҙмә, 1 синыф уҡыусылары менән уртаҡ сара</td></tr>
<tr><td colspan="2">Ҡыш тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Тәбиғәт күренештәре тураһында балаларҙың белемен тәрәнәйтеү (ҡар, бәҫ, боҙ, ҡылау) Һауа торошо тураһында халыҡ һынамыштары менән таныштырыуҙы дауам итеү. Йыл миҙгелдәренең үҙгәреүе кешегә , үҫемлектәр һәм йәнлектәр донъяһына тьәҫир итеүе тураһында белемдәрен киңәйтеү. Ҡышҡы спорт төрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Ҡыш көндәре кешеләрҙең хәүефһеҙлеген һаҡлау</td></tr>
</table>

<table>
<tr><td colspan="2">ҡағиҙәләре тураһында балаларҙың белемдәрен арттырыу.Һыу, ҡар һәм боҙ менән тәжрибәләр үткәргәндә балаларҙың аҡыл – зиһенен үҫтереү һәм эҙләнеү – тикшеренеүгә ҡыҙыҡһыныуҙарын формалаштырыу. Һәр ваҡыт ҡыш булған урындар тураһында балаларҙың күҙаллауҙарын үҫтереү. Арктика һәм Антарктика йәнлектәре тураһында балаларға белемдәр биреү. Ер шарының төрлө тарафтарында ҡыштың төрлөсә үҙенсәлектәре тураһынында мәғлүмәт биреү. Ҡышҡы спорт уйындары тураһында мәғлүмәт биреү. Арктика, Антарктида тәбиғәте, унда йәшәгән хайуандар, уларҙың көнитмеше тураһында белем биреү. Ҡош һәм хайуандарҙың ҡышҡа яраҡлашыуы, кешеләрҙең уларға ярҙам итеүе, ҡыш миҙгеленең кешкгә йоғонтоһо тураһында алдан алған белемдәрҙе киңәйтеү. Ҡыш миҙгеленең матурлығын тойорға, тасуирларға өйрәнеү. Ижади зауыҡ үҫтреүҙе дауам итеү.</td></tr>
<tr><td rowspan="4">Тема<br>30 ғинуар – 24 февраль<br><br>“Ватан һаҡсыһы көнө”<br>«День защитника Отечества»</td><td>«Кем ул Ватан һаҡсыһы?”</td></tr>
<tr><td>Республика хәрби Дан музейына интерактив сәйәхәт</td></tr>
<tr><td>“Рәсәй Армияһы – көслө армия!”</td></tr>
<tr><td>«Атай – ғаилә тотҡаһы»</td></tr>
<tr><td>Дөйөмләштереү сараһы</td><td>Атайҙар менән байрам иртәлеге</td></tr>
<tr><td colspan="2">Балаларҙың Армия тураһында белемдәрен киңәйтеү. Хәрби Дан музейы, башҡорт атлы кавалерия дивизияһы, башҡорт ғәскәрҙәре, башҡорт халҡының хәрби батырлыҡтары, Советтар Союзы Геройҙары, Рәсәй Армияһы ғәскәрҙәре тураһында мәғлүмәттәр биреү. Тыуған илде һаҡлау - ул ир – заттарҙың бурысы икәнен аңлатыу, ҡаһарманлыҡ, ҡыйыулыҡ сифаттарын, тыуған илгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү. Төрлө хәрби һөнәрҙәр менән таныштырыу: йәйәүле армия, диңгеҙ һуғышсандары, һауа һуғышсылары, танк ғәскәре,. Хәрби техника менән таныштырыуҙы дауам итеү. Гендер тәрбиәһе биреү, малайҙарҙа буласаҡ ил һаҡсыһы сифаттарын, ҡыҙҙарҙа ил һаҡсыларына ихтирам тойғоһон тәрбиәләү.</td></tr>
<tr><td rowspan="4">Тема<br>27 февраль – 10 март<br>“8 март”<br>«8 Марта»</td><td>«8 март байрамы”</td></tr>
<tr><td>“Ҡатын – ҡыҙҙар һөнәрҙәре”</td></tr>
<tr><td>«Сәскә кеүек ҡыҙҙар».</td></tr>
<tr><td>« Әсәкәйем- күҙ нурым»</td></tr>
<tr><td>Дөйөмләштереү сараһы</td><td>Әсәйҙәр ҡатнашлығында иртәлек. Балалар ижадынан күргәҙмә.</td></tr>
<tr><td colspan="2">Әсәйҙәргә, өләсәйҙәрәгә ҡарата ҡәҙер – хөрмәт тәрбиәләү. Әсәйҙәрҙең һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Әсә кешенең йәмғиәт ағзаһы булараҡ, үҙенгә генә хас сифаттары, башҡарған эше тураһында төшөнсәләр биреү. Ғаилә темаһына балалар эшмәкәрлеген әүҙемләштереү. 8 март – Халыҡ ара байрам икәнен, ҡатын ҡыҙҙарға ҡарата ихтирам тойғолары тәрбиәләү. Башҡорт халҡының арҙаҡлы ҡатын- ҡыҙҙары менән таныштырыу, Ҡатын – ҡыҙҙарҙы Яҙ образы менән сағыштырыу, Гендер тәрбиәһе буйынса балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Малайҙарҙың ҡыҙҙарҙы һаҡлаусылар булыуҙарын төшөнөүгә булышлыҡ итеү. Бүләктәр әҙерләүгә йәлеп итеү.</td></tr>
</table>

<table>
<tr><td rowspan="5">Тема<br>13 март – 24 март<br>“Башҡорт халыҡ йолалары һәм көнкүреше”<br>«Знакомство с башкирскими народными обычаями и бытом”</td><td>“Башҡорт халыҡ уйынсығы”</td></tr>
<tr><td>«Башҡорт халыҡ кәсептәре” (Умартасылыҡ, балыҡсылыҡ, балаҫ һуғыу, шәл бәйләү, йылҡысылыҡ, һунарсылыҡ)</td></tr>
<tr><td>Башҡорт халыҡ көнкүреше, ризыҡтары тураһында әкиәттәр.</td></tr>
<tr><td>“Башҡорт халыҡ орнаменттары, биҙәктәре”</td></tr>
<tr><td>«Башҡорт халыҡ фольклоры”<br>Ҡарға бутҡаһы, кәкүк сәйе,һабантуй</td></tr>
<tr><td>Дөйөмләштереү сараһы</td><td>Балалар ижадынан күргәҙмә. Фольклор байрамы.</td></tr>
<tr><td colspan="2">Башҡорт теленә, йолаларына, тарихына ҡарата ихтирам тәрбиәләүҙе дауам итеү. Ата – әсәһенең милләте буйынса, үҙенең милли сығышы менән таныштырыуҙы дауам итеү. Башҡорт халҡының үткәне , теле, арҙаҡлы кешеләре тураһында тәүге мәғлүмәттәр туплауҙы дауам итеү. Балаға уның ошо милләтең бер вәкиле, уны дауам иттереүсе икәнлеген аңлатыу. Башҡортостандағы төрлө милләт халыҡтары, мәҙәниәте, теле, ғөрөф – ғәҙәте һ.б. буйынса айырылыуын төшөндөрөү . Башҡорт халыҡ йолалары менән таныштырыуҙы дауам итеү (Нардуған, йөн тетеү, һуғым, ҡурмас ҡурыу ), башҡорт халҡының төп кәсеп һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү (солоҡсолоҡ, һунарсылыҡ). Халыҡ ижады өлөгөләре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Биҙәү – ҡулланма сәнғәте өлгөләре менән таныштырыуҙы дауам итеү. Фольклор өлөгөләрен бөтә төр эшмәкәрлектәрҙә ҡулланыу.<br><br>Музей менән аралашыу күнекмәһе формалаштырыуҙы дауам итеү. Башҡорт халҡының кәсеп – һөнәрҙәре, көнкүреше тураһында балаларҙың белемдәрен байытыуҙы дауам итеү. Һынлы сәнғәт, архитектура өлгөләре менә таныштырыу. “Ағиҙел” берекмәһендә яһалған сағыу һауыттар, “Салауат быяла” берекмәһендә әҙерләнгән һауыт – һаба өлгөләре менән таныштырыу. “Солоҡсолоҡ”, “Малсылыҡ” кәсеп һөнәрҙәре менән таныштырыуҙы дауам итеү.</td></tr>
<tr><td rowspan="4">Тема<br>27 март – 7 апрель<br>“Йәнле тәбиғәт”<br>«Живая природа»</td><td>«Тәбиғәт – йәшәү сығанағы»,<br>“Йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт”</td></tr>
<tr><td>Ер көнө. Үҫемлектәр, һыу аҫты, хайуандар донъяһы</td></tr>
<tr><td>“ Һаумыһығыҙ, ҡоштар!”</td></tr>
<tr><td>Атайҙар менән сыйырсыҡ оялары яһау</td></tr>
<tr><td>Дөйөмләштереү сараһы</td><td>“Ҡоштар - беҙҙең дуҫтар”. Викторина – ярыш. Ҡул эштәре выставкаһы.</td></tr>
<tr><td colspan="2">Үҙебеҙҙең уртаҡ йортобоҙ -Ер, унда тереклек итеүсе йән эйәләренә зыян килтермәй йәшәү этикетын булдырыуға өлгәшеү. Экологик тәрбиә, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш, ерҙәге, тыуған яҡтағы хайуандар донъяһы менән танышыу, ашарға табыу,урманда йәшәү,торлаҡ хәстәрләү сифаттары аша айырмалыҡтарын билдәләү. Кешеләрҙең хайуандарға ярҙамы тураһында һөйләү. Йорт хайуандары менән сағыштырыу. Үҫемлектәрҙең тирә -яҡ мөхиткә, йәшәйешкә яраҡлашыуы. Үҫемлектәрҙең ниндәй ихтыяждарға мохтаж булыуын, уларға тере йәнгә ҡараған кеүек ҡараш булдырыуға өлгәшеү.Үҫемлектәрҙең тере организм , уларҙың тын алыуын, тукланыуын, үҫеүен һәм үрсеүен аңлатыу, һәр үҫемлектең йәшәү мөхите барлығын төшөнөү.</td></tr>
</table>

| | |
|---|---|
| Урман экосистемаһы тураһында белемде нығытыу. Һыуҙағы йәнле тәбиғәт, хайуандар донъяһы менән танышыу, балыҡтар тураһында белемде киңәйтеү. Туҡланыу сылбыры, уның бәйлелеген төшөндөрөү, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Ҡоштар тураһында белемде йылы яҡтан ҡайтыуы тураһында белемде киңәйтеү. Ҡоштарҙы лайыҡлы ҡаршыларға әҙерләнеү. Төрлө ҡул эштәре, һүрәттәр төшөрөү. Ҡоштарҙың көнитмеше тураһында белемде киңәйтеү. Уларға ҡарата һаҡсыл ҡараш, һөйөү, бөтә ғаилә ағзалары менән ҡоштар тураһында белемде арттырыу, ата-әсәләрҙе төрлө сараларға йәлеп итеү маҡсатында эш ойоштороу. Атайҙар менән сыйырсыҡтарҙы ҡаршыларға әҙерләнеү. Сыйырсыҡтарға оя яһау эшен йәнләндереү. Ҡоштар тураһында шиғырҙар, тиҙәйткестәр, йырҙар өйрәнеү. Тәбиғәт тураһында белемде киңәйтеү. | |
| Тема<br>10 апрель - 20 апрель<br>**“Яҙ”**<br>**«Весна»** | **“Яҙ көнө тәбиғәттә үҙгәрештәр”** |
| | **«Яҙ көнө хайуандар һәм ҡоштар донъяһы”** |
| | **“12 апрель - Космонавтика көнө”** |
| **Дөйөмләштереү сараһы** | **Беҙ Гагаринсылар. Күңелле старттар.**<br>**Ер көнөнә, Космонавтика көнөнә балалар ижады күргәҙмәләре** |
| Миҙгел байрамы Наурыз тураһында мәғлүмәттәр биреүҙе дауам итеү. Яҙ миҙгеле билдәләре тураһында балаларҙың белемдәрен арттырыу. Күсер ҡоштарҙың әйләнеп ҡайтыуы, тәбиғәттә йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәт, улар араһындағы бәйләнеш тураһында белемдәр киңәйтеү.Йәнлектәрҙең һәм үҫемлектәрҙең тәбиғәттәге үҙгәрештәргә ҡарата ҡулайлашыуы тураһында күҙаллауҙар үҫтереү. Яҙғы эштәр буйынса белемдәр арттырыу. Урман, болон, ялан, ҡыр тураһында белемдәрҙе нығытыу. Болонда (һыуҙа ) йәшәүсе бөжәктәр тураһында күҙаллауҙар киңәйтеү.<br><br>Ер шары , ҡояш системаһы, йондоҙҙар тураһында балаларҙың белемдәрен арттырыуҙы дауам итеү. Ер шары һәм уның юлдашы Ай тураһында белемдәрен киңәйтеү. Уларҙың йәнле һәм йәнһеҙ тәбиғәткә йоғонтоһон аңлатыу эштәрен дауам итеү. Йыһан тураһында белем биреү. Глобус һәм карталар менән таныштырыуҙы дауам итеү. Күренекле йыһангирҙәр менән таныштырыу. Һауа транспорты тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. | |
| Тема<br>24 апрель- 12 май<br>**«Еңеү көнө»**<br>**«День Победы»** | **“ 9 май - Еңеү көнө”** |
| | **Башҡорт атлылары дивизияһы тураһында.** |
| | **Герой ҡалаларға интерактив сәйәхәт** |
| | **“Минең картатайым – Герой”** |
| **Дөйөмләштереү сараһы** | **9 май байрамына арналған сара. Мәктәптең музейына экскурсия.** |

| | |
|---|---|
| Ниндәй байрам ул ? май? Патриотик тәрбиә биреү. Бөйөк Ватан һуғышы геройҙары, уларҙың Советтар Союзы Геройҙары тип аталыуҙарын, (А.Матросов, М.Шайморатов, М.Гәрәйев, Башҡорт атлы дивизияһы,) Бөйөк Ватан һуғышында илебеҙҙең еңеүе тураһында балаларҙың белемдәрен киңәйтеү. Һуғыш геройҙарына арналған һәйкәлдәр, бюстар, таҡтаташтар менән таныштырыу. Герой ҡалалар менән танышыу, Ленинград блокадаһы тураһында мәғлүмәт биреү. Балаларҙы хәрби миҙал – ордендар менән таныштырыу. Төрлө ғәскәр төрҙәре, хәрби техника менән таныштырыуҙы дауам итеү (йәйәү, һыу, диңгеҙ, һауа, танк). Гендер тәрбиәһе биреү өҫтөндә эшләү. Һуғышта ҡатнашҡан, яуҙа ятып ҡалған олатай – ҡартатайҙар тураһында мәғлүмәттәр туплау, улар өсөн ғорурлыҡ тойғолары тәрбиәләү. | |
| Тема<br>15 май – 31 май<br>**«Һау бул, балалар баҡсаһы!»**<br>**«До, свидания детский сад!»** | **«Йәй етә”** |
| | **«Йәйге мөғжизә”** (Эксперименттар) |
| | **«Тәбиғәттә үҙгәрештәр”** |
| | **«Һау бул, баҡса!»** |
| **Дөйөмләштереү сараһы** | **Сығарылыш иртәлеге. 1 июнь – балаларҙы яҡлау көнөнә сара.** |
| Тәбиғәт үҙгәрештәре, йәйге миҙгел тураһында белемде киңәйтеү. Йәйге матурлыҡты күреү, тойоу, йәй миҙгелендәге эштәр менән танышыуҙы дауам итеү. Төрлө тәжрибәләр үткәреү. Сығарылыш төркөмө тәрбиәләнеүселәре өсөн сығарылыш иртәлегенә әҙерлек, Балаларҙы яҡлау көнө тураһында мәғлүмәттәр биреү. Балаларҙың хоҡуҡтары тураһында белешмәләр биреү. Байрам иртәлектәрендә әүҙем ҡатнашыуға өлгәшеү. | |